*Сәүиә ӘҒЗӘМОВА*

# Свердловск өлкәһе башҡорттары Өфөлә

*3-6 ғинуарҙа Башҡортостанда Свердловск өлкәһенән ҙур делегация ҡунаҡта булды. Екатеринбургтың 40 кешенән торған делегацияһын Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе* ***Нәфисә Фәсхетдин ҡыҙы Тюменцева*** *етәкләне. Уларҙың төп маҡсаты — бөгөнгө Башҡортостан, уның халҡы менән яҡындан танышыу, башҡалабыҙ Өфөнөң иҫтәлекле урындарында булыу, мәҙәни сараларҙа ҡатнашыу.*

4 ғинуарҙа Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге музыкаль гимназияла республикабыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре һәм хөкүмәт эшмәкәрҙәре делегация менән түңәрәк өҫтәл ойоштorҙo. Ҡунаҡтарҙы Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе Фирҙәүес Хисамитдинова сәләмләне. Осрашыуҙа Свердловск өлкәһендә ҡоролтай эшенең йәнләнеүе, был нәүбәттә өлкә ҡоролтайы рәйесе Н.Ф.Тюменцеваның ҙур эштәр башлауы тураһында әйтелде. “Был делегация беҙҙең тәүге ҡарлуғастарыбыҙ, — тине Нияз Мәжитов. — II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү алдынан сит өлкәләрҙәге башҡорттарҙы барлау, уларҙы туплау маҡсатында башҡарылған эштең башланғысы ғына. Киләсәктә башҡа өлкәләрҙәге башҡорт ҡәрҙәштәребеҙҙе, айырыуса йәш быуынды саҡырырға уйлайбыҙ. Ер шарындағы һәр бер башҡорт башҡорт рухында тәрбиә алырға тейеш”.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫарҙары Әлтәф Ғәйфуллин менән Фирҙәүес Хисамитдинова ҡунаҡтарҙы ҡотлап, иҫтәлекле сувенирҙар һәм бер көлтә ҡурай бүләк итте, яҙыусыларыбыҙ Сафуан Әлибаев, Рәшит Низамов, Рәсимә Ураҡсина, “Йәншишмә”, “Башҡортостан” гәзиттәре, “Ватандаш” журналы редакциялары хеҙмәткәрҙәре үҙ һүҙҙәрен ишеттерҙе. Түңәрәк өҫтәлдә Халыҡ мәғарифы, Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлыҡтары хеҙмәткәрҙәре менән күрше өлкәлә йәшәгән башҡорттарҙың проблемалары тураһында төплө фекер алышыу булды, уларҙы хәл итеү юлдары билдәләнде. Халыҡ мәғарифы министрлығының милли мәғариф бүлеге мөдире Зилә Япарова был өлкәлә Башҡортостандың Рәсәй Федерацияһының 14 регионы менән килешеү төҙөүе, республиканан ситтә йәшәгән башҡорттарға үҙ телен өйрәнеү өсөн һәр яҡлап ярҙам күрһәтелеүе тураһында һөйләп үтте.

Свердловск өлкәһендә Өфө-Шигәре һәм Үрге Пышма ҡалаларында башҡорт балалары туған телдәрен өйрәнә башланы. Әле лә ошо ҡалаларҙан килгән башҡорт теле уҡытыусылары Башҡортостан Мәғариф министрлығы бүләк иткән аудио-видеотаҫмаларҙы, методик ҡулланмаларҙы, таблица-плакаттарҙы, башҡортса-русса һүҙлектәр

һәм күргәҙмә әсбаптарҙы бик шатланып ҡабул итте.

Республикабыҙҙың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты ла был осрашыуҙы ойоштороуға үҙ өлөшөн индерҙе. Региональ бәйләнештәрҙе нығытыу уларҙың Уставында ҡаралған. ЮНЕСКО эштәре буйынса яуаплы секретарь Шәфҡәт Тутаев Свердловск делегацияһын Яңы йыл, яңы башланғыстар менән ҡотлап, уларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы.

Свердловск өлкәһе Мәғариф министрлығының эшмәкәрлеге тураһында Региональ белемде үҫтереү институтының бүлек мөдире, Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзаһы Зәйтүнә Нур ҡыҙы Шәймөхәмәтова бик ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр һөйләп үтте. Шуныһы фәһемле: улар өлкәнең дини ойошмалары менән тығыҙ бәйләнеш тоталар икән. 2002 йылға мосолмандар идаралығы менән килешеү төҙөгәндәр, фәнни-педагогик һәм мәҙәни эш буйынса килешеп, мәктәптәрҙә мосолман балаларына дин нигеҙҙәрен уҡыталар. “Бөгөнгө үтә ҡатмарлы ваҡытта, халыҡ ғөрөф-ғәҙәтен, динен юғалтып эсеү-тартыуға, наркоманияға бирелгән ваҡытта, милләтте ҡотҡарып алып ҡалыу өсөн был бик мөһим юл”, — тип дәлилләне һүҙен Зәйтүнә ханым.

Килгән делегацияның яртыһынан күберәге йәштәр булыу сәбәпле, түңәрәк өҫтәлгә Башҡорт йәштәре иттифағы рәйесе Лоҡманов Тимур саҡырылғайны. Ул үҙебеҙҙең йәштәр араһында ниндәй проблемалар ҡуҙғатылыуы, иттифаҡтың мәҙәни саралары, тәрбиәүи эштәре, киләсәккә пландары тураһында һөйләп үтте. Йәштәр иттифағы активисы, Свердловск өлкәһенән килеп Башҡорт дәүләт университетында уҡыусы Лариса Мөхәмәтуллина ике регион араһында бәйләнештәрҙең нығыныуын, ситтә ҡалған башҡорт йәштәренең Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү мөмкинлектәре киңәйеүен шатланып әйтеп үтте. БДУ студентҡаһы була алыуының да төп сәбәбе — Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарға юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн квота бүленеүендә. Был эштең башланғысында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты булғанға күрә, Лариса Ҡоролтай исеменә һәм республика етәкселегенә ҙур рәхмәт һүҙҙәре әйтте.

Өлкә ҡоролтайы рәйесе әйтеүе буйынса, Свердловск өлкәһендә лә башҡорт йәштәре менән эштәр яйға һалынып килә. Улар йыйылышып йәкшәмбе мәктәбенә йөрөйҙәр, туған телдәрен һәм Башҡортостан мәҙәниәтен өйрәнәләр. Йәштәр ойошторған фольклор ансамбле төрлө сараларҙа ҡатнаша. Лондонда моделдәр күрһәтеү буйынса хореография колледжы тамамлап ҡайтҡан Валерия Тюменцева “Йәш моделдәр” клубы асҡан. Улар гитарала уйнарға ла бик әүәҫтәр. Тик һәр ваҡыт бергәләшеп йыйылышырға үҙҙәренең айырым бинаһары ғына юҡ.

Түңәрәк өҫтәл һәм килгән ҡунаҡтар алдында “Аҡ тирмә” клубының активистары, Ф.Мостафина исемендәге башҡорт гимназияһы уҡыусыларының фольклор группаһы бик эстәлекле сығыш яһаны. “Аҡ тирмә” клубының рәйесе Ләлә Биишева үҙенең сығышында Свердловск өлкәһендә лә “Аҡ тирмә” кеүек ойошма булдырыу тураһында тәҡдим индерҙе.

Ҡунаҡтар ҙа буш килмәгән. Делегация составындағы фольклор группаһын етәкләгән Сәбинә ханымдың йәш артистары сәхнәлә башҡорт бейеүҙәрен профессиональ кимәлдә башҡарҙы. Екатеринбург ҡалаһында йәшәүсе, Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге премия лауреаты Франгиза Хәйретдинова башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарып, барыһының күңелен арбаны, кескәй Диана Нәсибуллина “Яратам мин илемде” тигән йыры менән халыҡты таң ҡалдырҙы. Свердловск ансамблен Дыуан районы балалар бейеү ансамбле (етәксеһе Шафиҡов) сәләмләүе сараны тағы ла йәнләндерҙе. Ҡунаҡтарҙың сығышына яуап итеп, Өфө дәүләт сәнғәт институты студенттары Илшат Йосопов менән Артур Ғайсаров та ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа оҫта сығыш яһанылар.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 107 29.07.02, 17:42

Бөтәһе лә был осрашыуҙың бик эстәлекле һәм фәһемле үтеүен билдәләп, киләсәктә йышыраҡ осрашыу теләге менән таралыштылар. Түңәрәк өҫтәлдән һуң ҡунаҡтарҙы Өфөләге бер-нисә уҡыу йорто ҡабул итте. Уҡыусы балаларға бигерәк тә сәнғәт институтының театр факультеты (деканы Т.Н.Хәбибуллина) студенттарының сығышы оҡшаны. Кисен уларҙы Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары “Эх, кәләше лә кәләше!” тигән спектаклгә саҡырҙы.

5 ғинуарҙа ҡунаҡтар Өфө ҡалаһының тарихи һәм иҫтәлекле урындарын күреү маҡсаты менән экскурсияға сыҡты. Беренсе нәүбәттә милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың һәйкәле эргәһенә барҙылар, уның данлы юлы тураһында тарих тыңланылар, һәйкәл эргәһендә иҫтәлеккә фотоға төштөләр. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында ҡунаҡтар “Бремен музыканттары” исемле музыкаль операны яратып тыңланылар, археологик музейҙы, Каруанһарай комплексын ҡаранылар һәм тағы ла күп иҫтәлекле урындарҙа булдылар. Ғөмүмән, Өфөләге һәр сәғәтен, һәр минутын ҡунаҡтар бик эстәлекле үткәрҙе. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов менән Свердловск өлкә ҡоролтайы рәйесе Нәфисә Тюменцева республика мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры урынбаҫары Т.А.Пушкарева менән осраштылар. Был осрашыуҙа региональ бәйләнештәргә ҡағылған күп мәсьәләләр күтәрелде.

Кисен Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге музыкаль гимназияла ҡунаҡтарҙы тағы ла сюрприз көтә ине. Сәнғәт институты студенттары, йәш йондоҙҙарыбыҙ Гөлсөм Бикбулатова, Ринат Фәттәхов үҙҙәренең йырҙары менән уларҙы таң ҡалдырҙы. Йәштәр иттифағы ағзалары дискотекала төрлө уйындар һәм милли бейеүҙәр ойоштторҙо.

Кисә һуңында өлкәндәр һәм ошо сәфәрҙе ойоштороусылар тағы түңәрәк өҫтәлгә йыйылды. Свердловск өлкә ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.Тюменцева уларҙың делегацияһын шундай йылы ҡабул иткәндәре өсөн Башҡортостан етәкселегенә, Башҡарма комитет исеменә рәхмәт белдерҙе. Ҡунаҡтарҙы ҡолас йәйеп ҡаршылағаны, торлаҡ мәсьәләләрен һәм мәҙәни сараларҙы етеҙ ойошторғаны өсөн Республика музыкаль гимназияһы директоры Ишморат Саяховҡа ҙур рәхмәт әйтелде һәм Свердловск өлкә ҡоролтайы исеменән Маҡтау грамотаһы тапшырылды. “Бөгөнгө ошо оло юлға сығыр алдынан ҡуйған маҡсаттарыбыҙ үтәлде тип уйлайым: балалар бөтә башҡорт халҡының баш ҡалаһы Өфөнө күрҙеләр, уның тарихи урындары менән таныштылар, мәҙәни сараларҙа ҡатнаштылар, үҙҙәренең дә телгә әүәҫ, йыр-моңға, бейеүгә оҫта икәндәрен күрһәттеләр. Был делегацияны Башҡортостанға алып килеү — Свердловск өлкә ҡоролтайының маҡсаты ине. Башҡорт телен өйрәнеү буйынса факультативтар ойоштороу, китап-әсбаптар табыу, фольклор группаһын төҙөү, моделдәр клубы эшен юлға һалыу еңелдән булманы. Быларҙың барыһын да мин I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарының, милләтте тергеҙеү буйынса эштәрҙең бер өлөшөн генә тормошҡа ашырыу тип уйлайым. Үҙебеҙҙең ярҙам менән тағы күп мөһим эштәр атҡарырбыҙ тигән уйҙамын”, — тип хушлашты делегация етәксеһе.

Рухи ҡеүәт һәм ҙур тәьҫораттар алған ҡунаҡтар яҡын арала Башҡортостанға тағы килеү ниәте менән ҡайтыр юлға сыҡты. Хәйерле юл һеҙгә, милләттәштәр!